Донъяла



ИОРДАНИЯ. Боронғо Петра ҡалаһы урынлашҡан ер - Иорданияла, ул ҡасандыр Набатей батшалығының баш ҡалаһы булған. Илдең әлеге баш ҡалаһы Аммандан көньяҡта - 215 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан был ҡала әле лә үҙенең ҡабатланмаҫ матурлығы менән һоҡландыра. Уны туристар бындағы ҡаяташтарҙың төҫөнә бәйләп, "алһыу ҡала" тип йөрөтәләр. Бөгөнгө заманды ете мөғжизәһе тигән конкурста Петра икенсе урынды яуланы.

Алһыу ҡала беҙҙең эраға тиклем 400 йыл элек төҙөлгән. Унан алыҫ түгел Һарун тип аталған тау бар. Һарун пәйғәмбәрҙең ҡәбере шунда тип иҫәпләнә. Шулай уҡ Муса пәйғәмбәр таяғы менән һуҡҡандан һуң атылып сыҡҡан ете шишмә лә шул ерҙән башланған тип баралар, тик уларҙы йылдар үтеү менән ҡомташ баҫҡан.

ҠАҘАҒСТАН. Илдең баш мөфтәйе АҠШ Генераль Консулы Майкл Стоунды ҡабул итте. Ержан хажи Малғажыулы: "Ислам - тыныслыҡ дине. Ул камил дин, унда фекер айырымлығына, кеше иҙеүгә урын юҡ. Мөхәммәд пәйғәмдәрҙең хәҙисендә әйтелгәнсә: "Ислам донъяны төҙәтәсәк". шулай уҡ һеҙгә исеме үтә лә билдәле булған көнбайыш драматургы Бернард Шоуҙың әйткәнен дә яҡшы беләһегеҙ: "Донъяны фәҡәт ислам ғына ҡотҡарасаҡ". Ислам - юғары әхлаҡҡа саҡырыусы, бөтөн насар ғәмәлде кире ҡағыусы яҡшылыҡҡа өндәүсе дин. Ләкин ҡайһы берәүҙәр уның тураһында насар фекер уятырға тырышлыҡ һала, шуға ҡарамаҫтан, донъяла исламға килеүселәр һаны арта ғына бара", - тине.

Генераль Консул, үҙ сыратында, АҠШ-та йәшәүсе мосолмандарҙың тормошо тураһында һөйләне. Баш мөфтәйҙә АҠШ-ҡа рәсми сәфәргә саҡырҙы.

ТӨРКИӘ. Анкарала Ҡөрьән ярҙамында, йәғни сүрәләр уҡып, ауырыуҙарҙан уңышлы дауалайҙар. Был алымды тәү тапҡыр Йенимахалле дәүләт хастаханаһында ҡулланалар. Бында психик сирлеләрҙе һауыҡтыралар. Баш табип Фатма Куш әйтеүенсә, сүрәләр шизофрения менән ауырығандарға ыңғай тәьсир итә. "Тәүге аудиокурстарҙан уҡ, сирлеләрҙең дөйөм хәле яҡшыра, улар үҙҙәрен тыныс тота башлай, ярһыуҙәүефләүҙәре ҡырҡа кәмей", ти Куш. Сирлеләр иһә был сеанстарға ҙур теләк менән йөрөй.

Ҡөрьән сүрәләрен уҡыусы һәм аңлатыусы имамдарҙы, хвстахана етәкселеге менән килешеү төҙөп, Анкара мөфтиәте тәғәйенләгән.

КИТӘБҮТ-ТӘРБИӘ

(Тәрбиә китабы)

Ҡәйүм НАСЫРИ

Утыҙ туғыҙынсы тәрбиә

Бер аҡыл эйәһенән һораныларр. "Изге бәхетле кемдер?" - тинеләр. Ул кеше әйтте: "Изге бәхетлелектең ғәләмәте шулдыр, донъяла һаҡланыусан булыр, әхирәтте онотмаҫ, ғибәҙәтсе булыр, аҙ һүҙле булыр, харамдан һаҡланыр, изгеләргә мөхәббәт итер, кесе күңелле булыр, йомарт булыр, шәфҡәтле булыр. Әммә яуыз бәхетле шулдыр, мал йыйырға хирыс булыр, нәфсеһенә эйәрер, күп һөйләшер, яуыздарҙы яратып, яуыз холоҡло булыр, хәйләкәр булыр, шәфҡәтһеҙ булыр, һаран булыр, үлемде онотор. Эй уғыл, был урында һиңә яҡшы бер тәрбиә барҙыр, изге бәхетле бул, яуыз бәхеттән һаҡлан, бында һиңә изге бәхет ғәләмәттәрен һанап килтереүҙән маҡсуд, һине изге бәхетле ҡылмаҡтыр.

Ҡырғынсы тәрбиә

Муса ғәләйһис-сәләм Ҡарунға бындай нәсихәт бирҙе:

"Аллаһ Тәғәлә һиңә ихсан ҡылды - һине бай итте. Инде ҙин ихсан һәм изгелек ҡыл", - тине. Ҡарун Мусаның һүҙен тыңламаны. Малы-мөлкәте менән уны изге ер йотто. Эй уғыл, берәү һиңә изге нәсихәт ҡылһа, йәнеңтәнең менән уны тыңла - ул өйрәткәнсә ғәмәл ҡыл.

Ҡырҡ беренсе тәрбиә

Эй уғыл, ике төрлө таифә барҙыр, файҙаһыҙға үә мәғәнәһеҙгә зәхмәт сигерҙәр. Берәһе шулдыр, аҡса үә мал йыйыр, үҙе файҙаланмаҫ. Йәнә берәһе шул ғалимдыр, ғилем өйрәнер, ғәмәл ҡылмаҫ. Был ике таифә йөмләһенән була күрмә, эй улым.

Ҡырҡ икенсе тәрбиә

Һәр бер сереңде дуҫына әйтмә, сәнки ҡайҙан беләһең, бер ваҡыт дошман булып китер. Дошманыңа, ҡулындан килһә, зарар итмә, бәлки бер ваҡыт үҙеңә дуҫ булыр. Дуҫындың дуҫына ла ышаныс юҡ, аң бул. Әммә ике дошман араһында һүҙ һөйләһең, белеп һөйлә: әгәр дуҫлашһалар үҙеңә оят булмаһын.

Ҡырҡ өсөнсө тәрбиә

Дуҫың менән һөйләшкәндә аҡрын һөйләш, һөйләшкән һүҙен дошманыңа ирешмәһен. Хатта бер диуар янында һөйләһең дә, аҡыл менән һөйләш, тағы диуар артында ҡолаҡ булмаһын. Әммә дошманындың нәсихәтен ҡабул итмәк хаталыр. Ләкин ишетмәктең ғәйәбе юҡ, сәнки ғибрәт алып ғәмәл ҡылғанһың.

Ҡырҡ дүртенсе тәрбиә

Ҡеүәте барында (сәләмәтлеге, байлығы, бәхете буйынса) изге ғәмәл ҡылмаған кеше зәғиф ваҡытында ҡатылыҡ күрер.

Ҡырҡ бишенсе тәрбиә

Эй уғыл, ете төрлө кешегә кәңәш итмә. Әүәле, наҙан кешегә кәңәш итмә, сәнки наҙан кеше, үҙенең наҙанлығына булышып, һине аҙғынлыҡ юлына һалыр. Икенсе, дошманыңа кәңәш итмә, сәнки дошман кеше һине һәләкәткә тартыр. Өсөнсө, хаситҡа үә көнсөл кешегә кәңәш итмә, сәнки көнсөл кеше һинең ниғмәтеңә зыян килеүен теләр. Дүртенсе, ике йөҙлө кешегә кәңәш итмә. Сәнки ул кеше һәр ҡайсан әҙәмдең ризалығынан ғына торор. Бишенсе, ҡурҡаҡ кешегә кәңәш итмә, сәнки ҡурҡаҡ кеше һиңә һис бер мәслихәт бирергә йөрьйәт ҡылмаҫ (мөмкин булмаҫ). Алтынсы, һаран кеше мал йыйырға хирыстыр, унда дөрөҫ кәңәш юҡтыр. Етенсе, малға ҡомһоҙ кешегә кәңәш итмә, сәнки нәфсегә эйәргән кеше нәфсеһенә ҡаршылыҡ ҡыла алмаҫ.

Ҡырҡ алтынсы тәрбиә

Халыҡҡа икмәк-тоҙ күрһәтмәгән кешенең үлгәс тә исемен алмаҫтар (балаларға ҡушмаҫтар). Тереклеге менән һөйөндөрмәгән кешенең үлеменә лә бик ҡайғырмаҫтар.

Ҡырҡ етенсе тәрбиә

Эй уғыл, үҙендең сихәтеңә үә үткән көндөң сәләмәтлегенә маһайып үә алданма. Сәнки ғүмерендең ваҡыты аҙҙыр, даими сихәттә булмауың бар. Бәс, сихәттең кәҙерен бел, үҙенде хайуан дәрәжәһенән сығар. Ләкин сихәтлекте һаҡлау шарттары күптер.

Ҡырҡ һигеҙенсе тәрбиә

Эй уғыл, сәскәненде урырһың, ҡылғанынды күрерһең, йәғни изге эш ҡлыһаң, изге яза алырһың үә яуыз эш ҡылһаң, михнәткә үә ғазапҡа лайыҡ булырһың.

Ҡырҡ туғыҙынсы тәрбиә

Эй уғыл, һаран кеше фәҡәт үҙ малының ҡарауылсыһылыр үә вариҫтарының хазинаһылыр, йәғни үҙенең малына бары ҡарауыл тора үә вариҫтарына тапшырмаҡ өсөн бары ваҡытын кәтәлер.

Илленсе тәрбиә

Эй уғыл, әхлағы яман кешегә, яуыз холоҡло кемсәнәгә күркәм фиғелең үә изге холоҡтарынды күрһәтмәк менән вәғәз үә нәсихәт ҡыл; телең менән нәсихәт ҡылғансы фиғелең менән нәсихәт ҡыл тимәктер. Шаят, был һүҙҙе баян ҡылмаһам да фәһем итһәң кәрәк.

Илле беренсе тәрбиә

Эй уғыл, яҡшылыҡтың кәҙерен белмәгән кешенән йыраҡ булыу яҡшы. Берәүгә бер яҡшылығың тейһә - һөйләп йөрөмә, берәүҙән яҡшылыҡ күрһәң - фаш ҡыл, онотма.

Илле икенсе тәрбиә

Эй уғыл, һәр ни ҡәҙәр эсендә сихәт үә затында йәшлек үә егетлек булһа ла тәүбәһеҙ үә васыятһыҙ ятып йоҡлама. Әҙәмдең әжәле күҙ менән ҡаш араһындалыр.

Илле өсөнсө тәрбиә

Эй уғыл, күршеләрен иғтибарһыҙ үә ихтирамһыҙ тоткан кеше ғәзиз үә хөрмәтле була алмаҫ. Үә ҡарындаштарын мәхрүм ҡуйған кеше - малының рәхәтен таба алмаҫ. Саф күңелле үә күркәм фиғелле булған кешене ололау үә ихтирам ҡылмаҡ заруҙыр.

Илле дүртенсе тәрбиә

Эй уғыл, бер кеше һине яуыз холҡо менән рәнйетһә, эскерһеҙлегең менән уға вәғәз ҡыл, йәғни унан асыу алайым тип мәшәҡәт сикмә. Егетлек үә кешелеклелектең тамамылыр, һәр ни йәһәттән булһа ла, ғәйреләрҙә булған хаҡынды онотһаң. Ғәйренең һиндә булған хаҡын хәтерендә тотһаң, быны егетлек тиерҙәр. Үс алырға үә яза бирергә көс етә тороп ғәфү менән мөғәмәлә ҡылмаҡ барса изге холоҡтарҙың күркәмерәгелер.

Илле бишенсе тәрбиә

Берәүҙән мохтаж икәнен белһең үә минән хәжәт теләр, тигән уйың бар икән, үҙе һорамаҫ элек тиҙерәк бирә күр.

Илле алтынсы тәрбиә

Эй уғыл, берәүгә иткән игелегең үә ярҙамынды үә уға иткән яҡшылығынды әйтеп, "Мин һиңә фәлән яҡшылыҡтар ҡылдым", - тип һөйләп йөрөһең, әҙәм тарафынан рәхмәт үә Аллаһ Тәғәлә тарафынан сауап өмөт итмә. Һин иҫенә төшөрмәһең, дә, ул кеше үҙе лә белә.

Илле етенсе тәрбиә

Эй уғыл, тар холоҡло кешенең ризығы ла тар була, имеш. Киң холоҡло үә сабырлы булырға тырыш. Тоғро һүҙле кешенең матурлығы артыҡ булыр, ни тиклем һүҙендә үә фиғелендә тоғро кешегә халыҡ: "Һай, матур кеше икән", - тип мөхәббәт итерҙәр.

Илле һигеҙенсе тәрбиә

Хәйерле мал шулдыр: хәләлдән килер; изге юлға сарыф ҡылыныр. Хәйерһеҙ мал шулдыр: харамдан килеп, насарлыҡ һәм әшәкелектәр юлына сарыф ҡылыныр. Эй уғыл, игелеклелек юлында хәләл кәсептән хасил булған малды харамға сарыф ҡылырға ярамай. Һәм уны харамға сарыф ҡылырға Аллаһ Тәғәлә ирек бирмәй. Хәләлдән килгән аҡса һис тә харамға китмәҫ. Эйәһе ундай малдың игелеген үҙе күрер, ул кеше үлгәнсе был байлыҡтан айырылмаҫ. Ә харамдан килгән мал иһә эйәһенә йоҡмай. Ул - харамдан килгән һәм тағы харамға китеп бөтәлер; китә башлаһа, эйәһе уны туктата алмайҙыр, тиҙ ваҡыт эсендә мохтажға ҡалалыр.

Илле туғыҙынсы тәрбиә

Эй уғыл, белеп тор, һиңә изгелек ҡылған кешегә яманлыҡ ҡылма, үә һиңә ниғмәт биргән кешене хурлама үә кәмһетеүле ҡараш менән ҡарама, залимлылығы күп булған кеше тиҙ һәләк булалыр. Залимлыҡтан зиядә (күп) һаҡланмаҡ кәрәк.

Алтмышынсы тәрбиә

Залимдарға өҫтөнлөк үә ярҙам биреүсе кеше - залимдарҙың береһелер үә әҙәмдәрҙең яуызырағылыр. Әммә, эй уғыл, залимлыҡ тигән нәмә аҡса үә ғәйре нәмә хаҡында ғына түгел, бәлки һүҙҙә үә фиғелдә ла залимлыҡ булалыр.

Алтмыш беренсе тәрбиә

Халыҡ араһында берәүҙе вәғәз үә нәсихәт ҡылмаҡ - уның башына һуҡмаҡ кеүектер. Һис шикһеҙ, ул кеше һиңә дошман булыр. Һинең нәсихәтенде тотоу ҡайҙа, хатта һинең һәләгеңә юл эҙләр. Халыҡҡа суфыйлығынды күрһәткән булып, булыр-булмаҫ ерҙә нәсихәт ҡылған булып маташма.

(Дауамы бар).
"Дәғүәт" нәшриәте.